МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

***Күңел асыу сараһы:***

# "Ҡоштар - беҙҙең дуҫтар!"

# *Ҡоштар-беҙҙеңдуҫтар*

***Маҡсат:***

- Балаларҙың беҙҙең яҡтың ҡоштары тураһындағы белемен тәрәнәйтеү, уларҙың көнкүрешенә, йәшәү үҙенсәлегенә иғтибар итеү;
- Ҡоштарға һаҡсыл ҡараш, тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү;
- Балаларға тирә-яҡ мөхитте, хайуандар донъяһын һаҡлау сараларын аңлатыу.

***Байрам барышы.***

Зал матур итеп биҙәлгән.Балалар музыка аҫтында залғаинәләр һәм ярым түңәрәккә торалар.



**Алып барыусы:**Һаумыһығыҙ,атай-әсәйҙәр,балалар һәм килгән ҡунаҡтар.Беҙ бөгөн “Ҡоштар – беҙҙең ҡанатлы дуҫтарыбыҙ!” тип исемләнгән,ҡоштар ҡайтыу хөрмәтенә ойошторолған байрам кисәһенә тылсымлы урманға йыйылдыҡ.

Яҙ етеү менән бөтә тәбиғәт уяна,йәнләнә башлай.Шул иҫәптән беҙҙең ҡанатлы дуҫтарыбыҙ ҙа йылы яҡтарҙан,үҙ тыуған илдәренә осоп ҡайта башлайҙар.Билдәле булыуынса уларҙың ҡайтыуы беҙҙең өсөн дә ҙур ҡыуаныс.Бөгөнгө байрамда беҙ һеҙҙең менән бергәләп ҡоштар тураһында белемебеҙҙе арттырырбыҙ,уларҙы иҫләп



алырбыҙ.Ә хәҙер яҙ килгәнгә ҡыуанып йырлап алайыҡ бергәләп.

***Йыр “Яҙ килә”***

**Алып барыусы:**Беҙҙең балалар яҙ тураһындабик күп матур шиғырҙар ҙа әҙерләнеләр.Әйҙәгеҙ рәхим итегеҙ.

***Шиғырҙар.***

**Алып барыусы:**Балалар иғтибар менән экранға күҙ һалайыҡ.Һеҙ нимәләр күрәһегеҙ.Эйе бында ҡоштар һүрәтләнгән.Ә ниндәй ҡоштар икән улар?Бында күсер ҡоштар.(слайд-перелетные птицы)

**Алып барыусы:**Балалар ишетәһегеҙме,ниндәйҙер тауыш ишетелә.Кем бында?(Көй ишетелә,залға Урман хужабикәһе инә,слайд-урман хужабикәһе.)

**Тәбиғәт хужабикәһе:**Һаумыһығыҙ,кемдәр бында шаулай?

**Алып барыусы:**Һаумыһығыҙ,беҙ балалар менән бында байрамға ҡоштар көнөн билдәләргә килдек.

**Тәбиғәт хужабикәһе:** Балалар әйтегеҙ әле һеҙ урман менән дуҫмы? Ул кешеләргә кәрәкме икән?(балалар тәбиғәт файҙаһы тураһында һөйләйҙәр:таҙа һауа,матурлығы менән ҡыуандыра,кешене ашата, ағастан төрлө нәмәләр төҙөйҙәр һ.б.)

**Тәбиғәт хужабикәһе:**Ысынлап та дөрөҫ балалар, урман-беҙҙең байлыҡ,матурлыҡ,уны һаҡларға һәм яҡларға һәр беребеҙ бурыслы. Ә һеҙ тәбиғәт ҡағиҙәләрен беләһегеҙме?

1. Ҡош ояларын туҙҙырма
2. Ҡоштарҙы һәм уларҙың балаларын тотма!
3. Урманда үҫемлектәрҙе, бөжәктәрҙе, ҡош ояларын тапамаҫ өсөн һуҡмаҡтан ғына йөрөргә тырыш!
4. Урманда һәм паркта шаулама, ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе ҡурҡытырһың.
5. Тәбиғәттесүпләмә!

(Слайд-тәбиғәт ҡағиҙәләре)

Ә бына ҡоштар беҙгә нисек ярҙам итәләр икән? (????????????????)

***Балаларҙың яуабы.(слайдтар)***

**Тәбиғәт хужабикәһе**: Балалар, мин дә һеҙгә ҡоштар тураһында мәғлүмәт биреп китәйем.

*Элек-электән кешеләрҡоштар донъяһы менән ҡыҙыҡһынған. Улар һымаҡ бейектә осорға, моңло итеп йырларға хыялланған. Шуға ла халыҡ араһында оҫта йырсыны – һандуғаҫ, ҡыйыу көрәшсене – бөркөт, һылыу ҡыҙҙарҙы – ҡарлуғас, аҡҡошом тип йөрөтәләр. Шулай уҡ ҡоштар образы һынамыштарҙа ла осрай. Сөнки беҙҙең ата-бабаларыбыҙ борон-борондан һауа торошон ҡоштарға ҡарап билдәләгән. Шуларҙың бер нисәүһе менән танышып хәтерҙә ҡалдырайыҡ.*

*Әсәйҙә беҙгә ярҙам итер.*

Ҡарлуғас түбән оҫһа, *ямғыр яуа.*

Ҡарғалар ағастың аҫҡы ботағына ҡунһа, *ел булыр*.

Һайыҫҡан шыҡырлаһы, *кеше килә.*

Сабыр сыйырсыҡтар алдан килһә, *иген уңыр.*



***Уйын "Ҡоштарҙы таныйһығыҙмы?"***(3 слайд етә, дидактик уйын формаһында, мәҫәлән:өс күсер ҡош,береһе ҡышлаусы).Балалар беҙ һеҙҙең менән ҡоштар тураһында бик күп мәғлүмәттәр алдыҡ,ә инде хәҙер уйнап алайыҡ.

**Алып барыусы:**Балалар, һеҙ күрмәгәндә, тәҙрә аша бер ҡош телеграмма ҡалдырып киткән.

***Телеграмма***

*Беҙ бер төркем ҡоштар, һеҙҙе һағынып йылы яҡтан ҡайтырға сыҡтыҡ. Әгәр ҙә бирелгән йомаҡтарҙың яуаптарын дөрөҫ тапһағыҙ, ниндәй*

*коштарҙың осоп ҡайтыуын белерһегеҙ. Тиҙҙән ҡайтып етербеҙ, осрашҡанға тиклем.*

**Тәбиғәт хужабикәһе**:Балалар ә хәҙер мин һеҙгә йомаҡтар ҡоям. Һеҙҙең менән эштәрҙе тикшереп барайыҡ. Бының өсөн экран ярҙам итер.

**А**) "Ҡар" ҙа "ҡар" тип осоп йөрөй,

Ҡысҡыра юҡҡа барға.

Исеме уның....... (ҡарға)

**Б)**Колға башында йорто,

Эсендә тора йырсы (сыйырсыҡ).

**В)**Йылы яҡҡа ирекһеҙҙән

Осоп китә ҡар яуғас.

Яр буйында, ҡыйыҡтарҙа

Оя ҡора......(ҡарлуғас)

**Г)**Яңғыратып һыу буйҙарын

Һайрай, алһыу таң тыуғас,

Моңло, дәртле..... (һандуғас)

**Е)**Кәкре муйын, аҡ йомғаҡ,

Йөрөй күлдә яр буйлап,

Йәлеп итә үҙенсә,

Зарлы көйҙәрен уйнап (аҡҡош)

**Алып барыусы:**балалар әйҙәгеҙ тәбиғәт Хужабикәһенә үҙебеҙҙең яратҡан йырыбыҙҙы йырлап ишеттерәйек.

***Йыр "Весна спешит"***

**Тәбиғәт хужабикәһе*:***Ҡайһылай матур йыр беләһегеҙ.Әйҙәгеҙ уйнап алайыҡ бергәләп.

***Уйын «Осто-осто»***

Кош осып инә.

**Кош*:*** Һаумыһығыҙ балалар,хәйерле көн ҡунаҡтар!Бына яҙ сәләме алып йылы яҡтарҙан тыуған яҡтарҙы һағынып ашҡынып дуҫтарыбыҙ менән ҡайтып төштөк.Тик бына беҙгә нимә эшләргә,белмәйбеҙ?



**Алып барыусы**:Нимә булды һуң ҡошсоҡ?

**Ҡош:**Беҙгә оялар ейтмәй бит.

**Алып барыусы:**Тәбиғәт хужабикәһе,ҡошсоҡ юҡҡа бойоҡһона,беҙҙең балалар атайҙары менән берлектә ҡоштарға оялар яһанылар,бына улар, экранға ҡарайыҡ әле.(слайд-сыйырсыҡ оялары...)Әйҙәгеҙ ҡошсоҡтоң кәйефен күтәреп күңелле бейеүҙе бейеп алайыҡ.

***Бейеү "Күңелле полька"***

**Ҡош***:* Ҡайһылай һеҙ яҡшы изге күңеллеһегеҙ,рәхмәт һеҙгә, ә хәҙер әйҙәгеҙ минең дуҫтарымды тылсымлы һүҙҙәрҙе әйтеп саҡырайыҡ, беҙ тышҡа сыҡҡансы, улар килеп тә етерҙәр.

Килегеҙ,кил ҡошҡайҙар
Һеҙ бит беҙҙең дуҫкайҙар
Баҡсабыҙға ҡуныгыҙ
Көн дә ҡунаҡ булығыҙ.



**Кош:**Рәхмәт инде балалар
Беҙҙе һеҙ ҡотҡарҙығыҙ
Тәҙерәнән һеҙҙе мин
Һәр байрамда ҡотлармын.

**Тәбиғәт хужабикәһе:**Әйҙәгеҙ бергәләп сыйырсыҡ ояларын ҡуйырға тышҡа сығайыҡ,ҡошсоҡ һин дә беҙҙең менән сыҡ.

**Алып барыусы:**Әйҙәгеҙ балалар.(барыһы ла тышҡа сыға,байрам тышта дауам итә.)